

***Таңсулпан ҒАРИПОВА,***
***яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты***

# Алға һәм юғарыға!

Заман һәм быуын кешеләренә үҙ һынауын, һорауын һәм бурысын ҡуя. Олатайҙарыбыҙ Рәсәйҙе Наполеон баҫҡынсыларынан әрсәләһә, атайҙарыбыҙ илде һәм Европаны фашистар ябырылыуынан азат итте. Ә беҙгә иһә — бөгөн бер түгел, ике утыҙҙы артылып, кем олоһо, кем кесеһе булғандарға — СССР тигән бөйөк державаның бер йән, бер тән булып ойошҡан, тотош организмдың — ҡан сәсрәтеп, иңрәп, һыҡтап тарҡалыуының шаһиты булырға, инде Ҡытай стенаһынан былайыраҡ қоршаған идеологияның ҡолауын күреп тетрәнергә, илдәге аҙағы ни менән бөтөрөн хатта юлбашсыларҙың үҙҙәре лә белмәгән үҙгәрештәрҙең уртаһында ҡайнарға, Ельцин вәғәҙә иткән суверенлыҡ идеяларына мөкиббән ышанып, ҡанатланып, башкөллө шул көрәш утында өйөрөлөргә тура килде. О! Күпте өмөт итте беҙҙең быуын: халыҡ, ниһайәт, ер аҫты һәм өҫтө байлыҡтарына үҙе хужа була, республика үҙәккә сеймал тапшырмай, ә үҙендә һуңғы продукцияны эшкәртә. Ә нефть? Ә алтын? Уйлап ҡараһаң, бер Миндәк руднигы ғына (рудниктарҙың иң бәләкәйе) Совет осоронда илле тоннанан ашыу алтын биргән...

Кеше хыялланырға тейештер ҙә. Шул хыялы булмаһа, Салауат та, йәше ике быуаттан ашып китеүгә ҡарамаҫтан, Ағиҙелдең иң текә ярында ат үрәпсетеп тормаҫ ине. Шул хыял булмаһа, инде бөтөүгә дусар ителгән башҡорт теле ҡабаттан күкрәк кирмәҫ ине; шул хыял-өмөт булмаһа, бөтә донъя башҡорттары бары ун биш йыл эсендә үҙҙәренең Баш йортона бер түгел, өс мәртәбә ҡорға йыйылмаҫ һәм уларҙың теләгенең реаль кәүҙәләнеше булған "Ватандаш" журналы донъя күреп, тиҫтә ярым ваҡыт аралығында, ун дүрт йәшендә айыуҙы һалған Салауат кеүек, көс-кеүәт туплап, эре аҙымдар менән киләсәккә тайпылмаҫ ине.

Халыҡ яҙмышы — Хаҡ Тәғәлә яҙмышы. 2000 йылда "Ватандаш"тың баш мөхәррире академик Ғайса ағай Хөсәйенов мине эшкә саҡырҙы. Ҡапыл ғына ҡырҡ эште ҡырҡ яҡҡа ташлап сығып китеп булмай, ул саҡырыуға йыл тирәһе ваҡыт үткәс кенә ҡуҙғалдым. Сибайҙағы эшем дә халыҡ өсөн бик кәрәкле булһа ла, "Ватандаш"та эшләгән йылдарым өсөн үкенес кисермәйем. Дүрт-

биш йыл эсендә бик күп мәҡәләләрем, очерктарым донъя күрҙе, “Бөйрәкәй“ пенталогияһының дүрт китабы тап ошо журналда баҫылды, коллегаларымдың әйтеүенә ҡарағанда, журналдың бәҫен күтәрештә, тиражының үҫешенә ыңғай йоғонто яһаны. “Ватандаш“тың йәш мөхәррире Фәрит Әхмәҙиев һәм ҡәләмдәштәрем ижадҡа рухландырҙы, һәр береһе хәленән килгән ярҙамды күрһәтештә. “Ватандаш“ ҡосағында тыуған “Бөйрәкәй“ҙе бер түгел, ике тапҡыр Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына тәҡдим итте. 2004 йылда, сирле кеше менән (ул саҡта Рәшит Назаров та тәҡдим ителгәйне) майҙан тотоу эш түгел, тип, был тәҡдимдән үҙем баш тарттым, ә 2006-ла инде Яҙыусылар союзы ла, “Ватандаш“ та тәҡдим иткәс, яйҙарына ҡуйҙым. Еңеү тантанаһын “Ватандаш“ менән бергә кисерҙем. Ҡыуаныс уртаҡ булды — яҙмыш мине “Ватандаш“ҡа килтермәһә, романдың ҡасан тамамланыры билдәһеҙ ине...

Заман талабы булараҡ донъя күргән “Ватандаш“ заман менән бергә атлай. Бигерәк тә халҡыбыҙҙың милли үҙаңын үҫтереүгә, генетик тамырҙарын юллауға, бөгөнгө хәленә оптимистарса ҡарарға йүнәлтелгән позицияла тороуы һөйөндөрә. Социумдың бөтә тармаҡтарына үтеп инергә тырышыуы, үҙенең биттәрендә уның иң мөһим, алдынғы өлгөләрен яҡтыртыуы ла халыҡта иртәгәһе көнгә ышаныс тәрбиәләй. Бынаһы — бер. Икенсенән, халҡыбыҙ бөтә донъя, кешелек менән өсөнсө меңйыллыҡҡа аяҡ баҫты. Беҙ йәш саҡта тауҙарҙа аҡ таш менән әҙәм буйы хәрефтәр ярҙамында “Руки прочь от Вьетнама!“ — тигән өндәмәләр яҙҙыҡ. Аҙаҡ Афғанстанда илебеҙ етәкселәре алып барған мәғәнәһеҙ һуғыш ҡорбандарын — унан ҡайтҡан цинк табуттарҙы әсәләренең күҙ йәшенә ҡушып ер ҡуйынына тапшырҙыҡ. Әҙәм ҡаны — эсәр һыу түгел. Беренсе Бөтә донъя һуғышында герман-рәсәй фронтында ике яҡтан башын һалғандарҙың нисбәте 10-ға 14 булһа, Бөйөк Ватан һуғышында был нисбәт 10-ға 43 булды. Өсөнсө меңйыллыҡ әле башланып ҡына тора, ә быйылғы йәйге янғында 40 миллион Рәсәй кешеһе зыян күрҙе, ҡорбандар ҙа байтаҡ. Эскелек, етемлек, эшһеҙлек проблемалары былай ҙа еңелдән булмаған көнкүреште ҡатмарлаштыра. Бәндәнең үҙе тарафынан тыуҙырылған проблемаларға тәбиғәт, йәшәйеш тыуҙырғандары өҫтәлә. Халҡыбыҙҙы, еребеҙҙе һуғарыр запастарҙың, һыулауҙарыбыҙҙың торошо ла “Ватандаш“тың иң төп хәстәрҙәренең береһенә әйләнергә тейештер.

Ташты таратып ырғытыуҙың үҙ ваҡыты — йыйып, бер урынға туплауҙың үҙ ваҡыты бар, ти фәйләсүфтәр. Кешелек быға тиклем яҙыҡлыҡтарҙы күп ҡылды, ә хәҙер ҡылғандары өсөн яуап тота. Кешелектең рухи таҙартыу юлында эшләйһе эштәре күп. Кешелектең таҙарыныуы, гонаһтарҙан әрселеүе һәр беребеҙҙән — бәндәнең үҙенән башлана. Шөкөр, халҡыбыҙҙың икенсе ҡәүемдәрҙе яу менән баҫыу, ҡоллоҡҡа дусар итеү кеүек ҡырағай тарихы юҡ. Әммә иң ҙур еңеү — үҙ-үҙеңде еңеү. Заман золомдарына ҡаршы торорға көсөбөҙ етерлекме? Бөгөнгө һандар — статистика ни һөйләй? Халҡыбыҙҙа рухи сафлыҡҡа ынтылыу тәрбиәләү шулай уҡ “Ватандаш“тың изге бурысы. Бөйөк Ватан һуғышында геройлыҡ эшләгәндәрҙең иң ҙур проценты — йәштәр. Беҙҙең “Ватандаш“ та йәш әле. Уға халҡыбыҙ менән бергә тормошто яҡшыртыу, күңелде сафландырыу юлында барырға ла барырға. Алға һәм юғарыға!